**Башҡортостан республикаһы Иглин районының муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы**

**«Түбәнге Ләмәҙ ауылының урта дөйөм белем биреү мәктәбе»**

| «Килешәм» | «Килешәм» | «Раҫлайым» |
|---|---|---|
| ММО етәксеһе | Директор урынбаҫары: | Мәктәп директоры: |
| ____Дәүләтшина Г.З. | ____ /Аҙнабаева Ф.З.) | ____ Харунова Т.А. |
| «29 »08 .2025г. | «29»08.2025г. | «29»08.2025 г. |

**«Башҡорт теле» уҡыу курсының**

**эш программаһы**

**5-9 класс**

**Үтәлеү ваҡыты: 2025-2029й.**

Төҙөүсеһе: башҡорт теле һөм әҙәбиәте уҡытыусыһы

Ишембаева Светлана Наил ҡыҙы

Башҡорт теле – башҡорт халҡының туған теле һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булып һанала. Һуңғы йылдарҙа республикала башҡорт теленең ҡулланыу даирәһе киңәйҙе, ижтимағи функцияһы көсәйҙе. Милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе яҡынлаштырыусы, яйға һалыусы сара булараҡ та уның мөмкинлектәре үҫте. Уҡыусыларҙа лингвистик (тел), аралашыу (коммуникатив), этнокультура өлкәһенә ҡараған (мәҙәни) компетенциялар булдырыу башҡорт телен өйрәнеүҙең маҡсатын тәшкил итә.

**Лингвистик компетенция** йәмғиәт күренеше булараҡ, тел тураһында тейешле белемде үҙләштереү нигеҙендә уның төҙөлөшөн, үҫешен, хәрәкәттә булыуын формалаштырыуҙы аңлата; башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын үҙләштереү; һүҙлек запасын һәм уҡыусы телмәренең грамматик төҙөлөшөн байытыу; фән булараҡ, лингвистика тураһында тейешле белем, уның төп бүлектәренә кәрәкле булған тел күренеше факттарын анализлау һәм баһалау мөмкинлектәрен формалаштырыу; төрлө лингвистик һүҙлектәрҙе ҡуллана белеү.

А**ралашыу** (коммуникатив) **компетенциһы** ул – башҡалар әйткәнде аңлау һәм үҙ фекереңде белдереү өсөн тупланған белем, оҫталыҡ, күнекмәләр йыйылмаһы; хәҙерге башҡорт теле нормаларына эйә булыу, һүҙ байлығын, һөйләмдең грамматик яғын дөрөҫ итеп үҙләштереү; телдән һәм яҙма формала бәйләнешле һөйләү күнекмәләрен булдырыу һ.б. Коммуниктаив компетенция аралашыуҙың маҡсатын билдәләй, телмәр ситуацияһын баһалай белеүҙе, аралашыусының коммуникация ысулдарын һәм ниәттәрен иҫәпкә алыуҙы, адекват стратегик аралашыуҙы һайлауҙы һәм үҙ телмәреңде аңлы рәүештә үҙгәртеүгә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.

**Мәҙәни (**этнокультура өлкәһенә ҡараған**) компетенция** туған телдең мәҙәниәтен сағылдырыусы форма булараҡ аңлауҙы күҙ уңында тота, тел һәм халыҡ тарихының бәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли- мәҙәни үҙенсәлеген**,** башҡорт телмәр этикет нормаларын үҙләштереүҙе, милли-мәҙәни компетентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыуҙы белдерә.

**Башҡорт теленән 5-9 класс өсөн эш программаһында** уҡыусыларҙың туған телгә, һүҙгә булған ҡыҙыҡһыныуын һәр саҡ үҫтерә барыу, туған телдең байлығын, һүрәтләү сараларын күрһәтеү, һүҙ һәм уның формалар төрлөлөгөн телмәрҙә ҡулланыуға ынтылыш тәрбиәләү, уҡыусыларҙы туған телдән ныҡлы, аңлы белем алырлыҡ итеп уҡытыу бурысы ҡуйыла.

Түбәнге Ләмәҙ урта дөйөм белем биреү мәктәбендә башҡорт теле уҡытыуҙың **төп бурыстары** түбәндәгеләр:

- уҡыусыларға башҡорт теленең фонетикаһынан, лексикаһынан, һүҙьяһалыш менән грамматикаһынан, стилистикаһы менән пунктуацияһынан, телдең ижтимағи тормоштағы функцияһы, телдең үҫеше хаҡында программала билдәләнгән күләмдә ныҡлы белем биреү;
- туған телгә ҡарата һөйөү, мәҙәниәт күренеше булараҡ, телгә ҡарата аңлы ҡараш тәрбиәләү; туған телдең төп аралашыу, кеше эшмәкәрлегенең төрлө

сфераһынан белем алыу ҡоралы булыуын, йәмғиәттә ҡабул ителгән әхлаҡ-этик нормаларҙы үҙләштререү сараһы булыуын аңлау; туған телдең эстетик ҡиммәттәрен үҙләштереү;

- көндәлек тормошта һә уҡыу эшмәкәрлегендә туған телде аралашыу сараһы булараҡ үҙләштереү; үҙ-ара аңлашыу һәм фекер алашыуға һәләтлелекте үҫтереү; үҙ телмәреңде камиллаштырыу; мҡһим төп уҡыу белемен һәм универсаль уҡыу хәрәкәттәрен (эшмәкәрлек маҡсаттарын аныҡ итеп әйтә белеү, уны планлаштырыу, библиографик эҙләнеү үткәреү, төрлө типтағы лингвистик һүҙлектәрҙән, сығанаҡтарҙан, Интернеттан тейешле мәҡлүмәтте һайлап алыу һәм эшкәртеү һ.б.) үҙләштереү;
- тел системаһы төҙөлөшөн һәм уның хәрәкәттә булыу законлығын үҙләштереү; стилистик ресурстарҙы һәм төп әҙәби тел нормаларын күҙәтергә өйрәнеү; анализлау, сағыштырыу, классификациялау һәм тел факттарын баһалау һәләттәрен үҫтереү; яҙма һәм һөйләү телмәрен, телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен, аралашыуҙың төрлө ситуацияларында телде ҡулланыу ҡағиҙәләрен, телмәр этикет нормаларын үҙләштереү; актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу; телмәрҙә грамматик сараларҙы ҡулланыу күләмен киңәйтеү; алынған белемде, күнекмәне аралашыу процесында, уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу һәләтлеген камиллаштырыу.

Башҡорт теле һәм рус теле предметтарында оҡшаш грамматик категориялар барлығын иҫәпкә алып, темаларҙы өйрәнгәндә йәнәш ҡуйып (сопостовительная грамматика), параллель аңлатыу отошло.

Уҡыусыларҙың дөйөм грамоталылығын тикшереү һәм үҫтерү өсөн төрлө характерҙағы диктанттар, шулай уҡ һүҙлек байлығын арттырыу, бәйләнешле телмәр үҫтереү, логик фекерләү дәрәжәһен камиллаштырыу маҡсатында инша һәм изложениелар яҙҙырыла.

Эш программаһы тел белеме тармаҡтары араһында системалылыҡ һәм эҙмә-эҙлелек, фәннилек, аңлайышлылыҡ принциптарын иҫкә алып төҙөлдө.

Бөгөнгө көн шарттарында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ һаҡлап ҡалыу өсөн, белем биреүҙә һөнәри оҫталыҡ, заман талап иткәнсә юғары технологиялар, мәғлүмәт саралары менән хәбәрҙар булыуҙы талап итә.

**Курстың төп йөкмәткеһе**

5 класс

1.**Уҡыу йылы башындағы ҡабатлау** . Тел-аралашыуҙың иң мөһим сараһы. Башланғыс кластарҙа өйрәнгәнде ҡабатлау. Исем. Сифат.Сифат дәрәжәләре. Һүҙ киҫәктәре. Һан. Ҡылым. Бәйләнешле телмәр үҫтереү. Иҫкәртмәле диктант “Тәрбиәле бала”.

2.**Синтаксис һәм пунктуация** . Һүҙбәйләнеш. Һөйләм. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Аныҡлаусы. Тултырыусы. Хәлдәр. Һөйләмдең тиң киҫәктәре. Бәйләнешле телмәр үҫтереү.Изложение. Текст. Өндәш һүҙ. Ҡушма һөйләм. Тура телмәр. Тура телмәрҙә тыныш билдәләре. Контроль диктант.

3. **“Фонетика һәм графика.Орфография. Телмәр мәҙәниәте** . Инеш дәрес. Башланғыс кластарҙа үтелгәнде ҡабатлау. Фонетика. Графика. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Айырыу билдәләре: *ь,ъ*. Өн һәм хәреф. Алфавит. Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы: *о,ө, ы, е.* Ижек. Уларҙың төрҙәре. Баҫым. Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеше. Тартынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеше. Өндәрҙең оҡшашыуы.

4. **Лексика.Телмәр мәҙәниәте.** Лексика тураһында төшөнсә.Һүҙҙең мәғәнәһе. Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеге.Омонимдар. Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәһе. Синонимдар. Антонимдар. Бәйләнешле телмәр үҫтереү.Карт.буйынса инша.

5. **Һүҙьяһалыш һәм орфографияны өйрәнеү.**Тамыр һәм ялғауҙар. Ялғауҙарҙың төрҙәре. Тамыр һәм яһалма һүҙ. Ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы. Өйрәтеү диктанты. Һүҙьяһалыш. Һүҙҙәрҙең яһалыу юлдары. Ҡушма һүҙҙәр. Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Контроль изложение. «Янғантау”. Контроль диктант.

**6-сы класс**

1.**Тел.** Туған тел, милли тел, ҡәрҙәш тел.

2.**Үтелгәндәрҙе ҡабатлау**. Һөйләм, интонацион төрҙәре, тура телмәр, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр, нығынған һүҙбәйләнештәр, һүҙьяһалыш юлдары

3.**Лексика** . Лексиканың мәғәнә, килеп сығышы, ҡулланылышы, бүленеше.

4.**Исем** . Килеш мәғәнәләре. Эйәлек һәм хәбәрлек заттары.

Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең килеш менән үҙгәреше

5.**Сифат** . Морфологик билдәләре, синтаксик роле, яһалыу юлдары,

сифатлашҡан исемдәр, исемләшкән сифаттар, төп һәм сифаттар, сифат дәрәжәләре

6. **Һан** . Лексик, морфологик билдәләре, синтаксик роле, ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы, төркөмсәләре, исемләшкән сифаттар

7. **Алмаш**. Мәғәнә, ҡулланылыу үҙенсәлектәре, грамматик билдәләре, төркөмсәләре,

яһалышы, үҙгәреше

8. **Ҡылым** . Ҡылым төркөмсәләре, уларҙың аңлатҡан мәғәнәләре, йүнәлештәре

9. **Рәүеш** . Лексик, морфологик билдәләре, синтаксик вазифалары, төркөмсәләре, сифат менән оҡшаш һәм айырмалы яҡтары, яһалышы

10.**Теркәүестәр** . Телмәрҙәге функцияһы, бүленеше

11.**Бәйләүестәр** . Телмәрҙәге функцияһы, бүленеше

12. **Киҫәксәләр**. Морфологик билдәләре, бүленеше

13. **Мөнәсәбәт һүҙҙәр** . Мәғәнәһе, синтаксик роле, исемләшеү осраҡтары

14. **Ымлыктар.**Мәғәнәләре, морфологик, синтаксик үҙенсәлектәре, бүленеше

15.**Оҡшатыу һүҙҙәре**. Мәғәнәһе, лексик, морфологик һәм синтаксик үҙенсәлектәре

16.**Ҡабатлау** .

**7 класс**

1. Башҡорт теле – беҙҙең туған телебеҙ.

2. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**3.СИНТАКСИС. ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШ.**Синтаксистың төп маҡсаты. Һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. Һүҙбәйләнештәрҙең яһалыу юлдары. Эйәртеүле бәйләнештең төрҙәре. Телмәр үҫтереү. Инша “Бәхетле ҡартлыҡ”. Ярашыу. Телмәр үҫтереү. А.Тюлькиндың “Салауаттың өйө” картинаһы буйынса инша. Башҡарылыу. Йәнәшәлек. Һөйкәлеү. Һүҙбәйләнеш һәм ҡушма һүҙ.

Нығынған һүҙбәйләнештәр. Телмәр үҫтереү. Ә.Лотфуллиндың “Хушлашыу” картинаһы буйынса инша. Диктант “Урман - тыуған төйәк”.

4. **ЯБАЙ ҺӨЙЛӘМ Һөйләмдең баш киҫәктәре** . Эйә менән хәбәр. Телмәр үҫтереү Ә.Ситдикованың “Башҡорт балы” картинаһы буйынса инша. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ. Телмәр үҫтереү. Инша “Тырышлыҡ – бәхет баҫҡысы”

5. **Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре**. Аныҡлаусы. Телмәр үҫтереү. Инша “Беҙҙең ауыл”. Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар. Өҫтәлмәлек. Тултырыусы. Тура һәм ситләтелгән тултырыусы. Диктант “Утрауҙа – мышылар”

6. **Хәлдәр .** Рәүеш хәлдәре. Күләм-дәрәжә хәлдәре. Урын хәлдәре. Диктант “Айыуҙың аҡылы бармы?” Ваҡыт хәлдәре. Шарт хәлдәре. Телмәр үҫтереү. Изложение “Белем алыу – бәхет ул” Сәбәп хәлдәре. Маҡсат хәлдәре. Кире хәлдәр. Һөйләмдә һөйләм киҫәктәренең урынлашыу тәртибе. .

7. **ИКЕ ҺӘМ БЕР СОСТАВЛЫ ҺӨЙЛӘМДӘР .** Ике составлы һөйләмдәр. Бер составлы һөйләмдәр. Телмәр үҫтереү. Изложение ““Күңелле ваҡыттар””. Диктант “Әсә хәстәрлеге”

8. **Бер составлы һөйләмдәр** . Билдәле эйәле һөйләм. Билдәһеҙ эйәле һөйләм. Эйәһеҙ һөйләм. Атама һөйләмдәр. Диктант “Ҡайтыу” Тулы һәм кәм һөйләмдәр. Телмәр үҫтереү Р.Нурмөхәмәтовтың “Батыр тураһында легенда.Тыуған ауылда” картинаһы буйынса инша. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. Тиң киҫәктәр эргәһендә тыныш билдәләре. Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр. Телмәр үҫтереү. Изложение “Буш хыял”. Диктант “Йәштән сынығырға кәрәк”

9. **ҺӨЙЛӘМ КИҪӘКТӘРЕ МЕНӘН ГРАММАТИК БӘЙЛӘНЕШЕ БУЛМАҒАН ҺҮҘҘӘР** . Өндәш һүҙҙәр. Өндәш һүҙҙәр эргәһендә тыныш билдәләре. Инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр. Диктант “Салауат күпере”.

10. **ҺӨЙЛӘМДЕҢ АЙЫРЫМЛАНҒАН ЭЙӘРСӘН КИҪӘКТӘРЕ** . Айырымланыу тураһында төшөнсә. Өҫтәлмәлектәрҙең айырымланыуы. Телмәр үҫтереү. Изложение “Малайҙар хатаһын төҙәтә” Аныҡлаусыларҙың

айырымланыуы тураһында. Хәл әйтемдәре һәм уларҙың үҙенсәлеге. Хәл әйтемдәренең айырымланыуы. Телмәр үҫтереү. К.Дәүләткилдеевтың “Башҡорт өйөнөң күтәрмәһе” картинаһы буйынса инша. Тура һәм ситләтелгән телмәр. Тура телмәрле һөйләмдәр. Уларҙа тыныш билдәләре. Диалог. Цитаталар. Контроль диктант “Үлемгә үс итеп”. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**8-се класс**

1.Инеш дәрес. Синтаксис буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау .

2.**Ҡушма һөйләм** . Ҡушма һөйләм буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Инша “Тәбиғәттең һәр миҙгеле аҫыл”. Изложение“Сыңрау торна”. Ҡушма һөйләм тураһында дөйөм төшөнсә. Теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм, уларҙа тыныш билдәләре. Инша “Матурлыҡҡа һоҡлана ла, уны һаҡлай ҙа бел”. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе ҡабатлау. Контроль диктант “Әсәйем юлға сыға”. Хаталар өҫтөнлә эш. Изложение “Командир”.

3. **Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.** Баш һәм эйәрсән һөйләм. Эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә эйәреү (бәйләнеү) саралары/ Тыныш билдәләре. Инша “Өр яңы йыл килә”.

4. **Эйәрсән һөйләм төрҙәре** . Эйә һөйләм. Эйәрсән хәбәр һөйләм. Аныҡлаусы һөйләм. Тултырыусы һөйләм.

5. **Хәл һөйләмдәр** . Ваҡыт һөйләм. Изложение “Таң нурҙары”. Урын һөйләм. Рәүеш һөйләм. Күләм-дәрәжә һөйләм. Сәбәп һөйләм. Инша “Кешеләргә һөйөүегеҙҙе йәлләмәгеҙ”. Маҡсат һөйләм. Шарт һөйләм. Кире һөйләм. Эйәрсән һөйләм төрҙәрен ҡабатлау. Инша “Башҡортостан-гөлбостан, былбылстан, нурбостан, шунда тыуып, шунда үҫкән башҡорт тигән арыҫлан”. Контроль диктант “Ат яратыу”. Хаталар өҫтөндә эш.

6. **Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр** . Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләм. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрһә тыныш билдәләре. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр.

Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Контроль диктант “Тормош йәме”. Хаталар өҫтөнлә эш. Теҙемдәр. Ҡушма һөйләм темаһын ҡабатлау. Изложение “Алтын ҡуллы Сабира”.

7. **Тыныш билдәләре ҡуйылышын ҡабатлау, дөйөмләштереү** .Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре. Өтөр ҡуйылыу осраҡтары. Нөктәле өтөр ҡуйылыу осраҡтары. Һыҙыҡ ҡуйылыу осраҡтары. Изложение “Ир исеме иҫкермәй”. Ике нөктә ҡуйылыу осраҡтары. Тыныш билдәләре ҡуйылышын ҡабатлау. “Ил яҙмышы – тел яҙмышы” инша. Контроль диктант “Берҙән-бер моң”. Хаталар өҫтөнлә эш. 5-8-се кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Дөйөмләштереү. Контроль диктант “Дала кисе”. Хаталар өҫтөнлә эш.

**9-сы класс**

**1.Телтураһында дөйөм төшөнсә** .Тел фәнен ни өсөн мотлаҡ өйрәнергә кәрәк? Тел тураһында дөйөм төшөнсә. Йәмғиәт тормошонда телдең роле. Тел – үҫә барыусы ижтимағи күренеш. Башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле. Башҡорт теле башҡа ҡәрҙәш телдәр араһында.

2. **1-се бүлек**. Әҙәби тел һәм диалект. Башҡорт теленең диалекттары. Башҡорт теленең диалекттары. Практик эш. Башҡорт әҙәби теле һәм уның үҫеше. Ике теллелек. Үтелгән темалар буйынса күнегеүҙәр. Телмәр үҫтереү. Инша “Уй күрке – тел, тел күрке – һүҙ” темаһына публицистик инша.

3. **2-се бүлек**.Башҡорт теленең стилдәре. Телмәр әҙәниәте. Функциональ стилдәр. Уларҙың төп үҙенсәлектәре. Йәнле һөйләү стиле. Матур әҙәбиәт стиле. Фәнни стиль. Публицистик стиль. Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле. Хаттар стиле. Үтелгән темалар буйынса күнегеүҙәр. Телмәр үҫтереү. Изложение “Ирәндек тауы”

4. **3-сө бүлек**. Һүрәтләү саралары. Эпитет. Сағыштырыу. Метафора. Телмәр үҫтереү. Инша “Кәҙерле тыуған ерем, һине ҡыйырһытырға ирек бирмәбеҙ”. Хаталар өҫтөндә эш. Синонимдар һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Грамматик синонимдар. Тасуирлауҙа антитезаны файҙаланыу. Телмәр үҫтереү. Инша “Осҡон һүнгән урынды көл ала, ҡояш уҙған юлда нур ҡала”. Һүҙҙе һәм уның

формаларын телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. Телмәр үҫтереү буйынса күнегеүҙәр. Телмәр үҫтереү. Изложение “Ат сабыштары”. Контроль диктант “Ирмәк”.

5. **Риторика** . Риторика тураһында төшөнсә. Һөйләнәһе һүҙҙең йөкмәткеһе. Темаһы һәм сиктәре. Тезистар һәм дәлилдәр. Материалдарзы һайлау һәм системалаштырыу. Тексттың дөйөм композицияһы инеш. Төп өлөш, һығымта. Тексттың планы, Тезис һәм конспект. Практик эш. Мәҡәләгә план төҙөү. Тексты ижад итеүҙә тел саралары. Телмәрҙә һүрәтләү-тасуирлау саралары. Телмәрҙең лексик һәм синтаксик үҙенсәлектәре. Практик эш. Мәҡәләгә рецензия яҙыу. Һөйләү һәм уҡыу стилдәре. Дискуссия, диспут һәм төрлө бәхәс төрҙәре. Практик эш. Доклад, лекция текстарына анализ яһау. Билдәләнгән темалалар менән сығыштар яһау.Контроль диктант.

6. **5-9- сы кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм тәртипкә килтереү** . Фонетика. Орфоэпия. Орфография. Телмәр үҫтереү. Инша “Китап - белем шишмәһе”. Лексика. Башҡорт теленең һүҙлектәре. Һүҙьяһалыш. Морфология. Орфография. Телмәр үҫтереү. Изложение А.Йәғәфәрованың “Килендәр” әҫәренән өҙөк. Синтаксис һәм пунктуация. Контроль диктант “Алмағас”. Телмәр үҫтереү. Инша “Тормоштағы ғәҙеллек һәм ғәҙелһеҙлек, хаҡлыҡ һәм нахаҡлыҡ”. Контроль диктант “Ҡурайсы”. Телмәр үҫтереү. Изложение “Әнүр Вахитов”. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

## 3. Уҡыу планына ярашлы сәғәттәр бүленеше

**5-се класс**

| № | Дәрес темаһы | Сәғәт һаны |
|---|---|---|
| | **Уҡыу йылы башындағы ҡабатлау** | |
| 1 | Тел-аралашыуҙың иң мөһим сараһы | 1 |
| 2 | Башланғыс кластарҙа өйрәнгәнде ҡабатлау. Исем | 1 |
| 3 | Сифат.Сифат дәрәжәләре | 1 |
| 4 | Һүҙ киҫәктәре | 1 |
| 5 | Һан | 1 |
| 6 | Ҡылым | 1 |
| 7 | Бәйләнешле телмәр үҫтереү. Иҫкәртмәле диктант | 1 |

| | | |
|---|---|---|
| | “Тәрбиәле бала” | |
| **Синтаксис һәм пунктуация** | | |
| 1 | Һүҙбәйләнеш | 1 |
| 2 | Һүҙбәйләнеш | 1 |
| 3 | Һүҙбәйләнеш | 1 |
| 4-5 | Һөйләм | 2 |
| 6 | Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр. | 1 |
| 7 | Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр. | 1 |
| 8-9 | Һөйләмдең баш киҫәктәре | 2 |
| 10 | Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре | 1 |
| 11 | Аныҡлаусы | 1 |
| 12 | Аныҡлаусы | 1 |
| 13 | Тултырыусы | 1 |
| 14 | Тултырыусы | 1 |
| 15 | Хәлдәр | 1 |
| 16 | Хәлдәр. Биремле диктант | 1 |
| 17-18 | Һөйләмдең тиң киҫәктәре | 2 |
| 19 | Бәйләнешле телмәр үҫтереү.Изложение | 1 |
| 20-21 | Текст. | 2 |
| 22 | Өндәш һүҙ. | 1 |
| 23-24 | Ҡушма һөйләм | 2 |
| 24 | Тура телмәр. | 1 |
| 25 | Тура телмәрҙә тыныш билдәләре. | 1 |
| 26 | Контроль диктант | 1 |
| **“Фонетика һәм графика.Орфография. Телмәр мәҙәниәте** | | |
| 1 | Инеш дәрес. Башланғыс кластарҙа үтелгәнде ҡабатлау. Фонетика. Графика. | 1 |
| 2 | Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр | 1 |
| 3 | Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр | 1 |
| 4 | Айырыу билдәләре: *ь,ъ*. Өн һәм хәреф. Алфавит | 1 |
| 5-6 | Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы: *о,ө, ы, е*<br>Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы | 2 |
| 7 | Ижек. Уларҙың төрҙәре | 1 |
| 8 | Баҫым | 1 |
| 9 | Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеше | 1 |
| 10 | Тартынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеше | 1 |
| 11 | Өндәрҙең оҡшашыуы | 1 |
| | **Лексика.Телмәр мәҙәниәте** | |
| 1 | Лексика тураһында төшөнсә.Һүҙҙең мәғәнәһе | 1 |
| 2 | Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеге.Омонимдар. | 1 |

| | | |
|---|---|---|
| 3 | Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәһе. | 1 |
| 4 | Синонимдар | 1 |
| 5 | Антонимдар | 1 |
| 6 | Бәйләнешле телмәр үҫтереү.Карт.буйынса инша. | 1 |
| | **Һүҙьяһалыш һәм орфографияны өйрәнеү** | |
| 1Тамыр һәм ялғауҙар 1 | | |
| 2 | Ялғауҙарҙың төрҙәре | 1 |
| 3 | Тамыр һәм яһалма һүҙ | 1 |
| 4 | Ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы | 1 |
| 5 | Ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы | 1 |
| 6 | Өйрәтеү диктанты | 1 |
| 7 | Һүҙьяһалыш. Һүҙҙәрҙең яһалыу юлдары | 1 |
| 8 | Һүҙьяһалыш. Һүҙҙәрҙең яһалыу юлдары | 1 |
| 9 Ҡушма һүҙҙәр 1 | | |
| 10 | Ҡушма һүҙҙәр | 1 |
| 11 | Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы | 1 |
| 12 | Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы | *1* |
| 13 | Контроль изложение. «Янғантау". | 1 |
| 14 | Контроль диктант. | 1 |
| 15 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 |
| | | |

**6-сы класс**

| № | Дәрес темаһы | Дәрес һаны |
|---|---|---|
| 1 | Туған тел – алтын асҡыс | 1 |
| | **Бишенсе класта үтелгәнде ҡабатлау.** | |
| 1 | Синтаксис һәм пунктуация. | 1 |
| 2 | Фонетика лексика, һүҙьяһалыш. | 1 |
| | **Лексика.** | |
| 1 | Башҡорт теленең һүҙлек составы. | 1 |
| 2 | Лексиканың төркөмләнеүе | 1 |
| 3 | Телмәр үҫтереү. Изложение " Йәйге матурлыҡ" | 1 |
| 4 | Башҡорт телендә дөйөм һәм тар ҡулланышлы һүҙҙәр. | 1 |
| 5 | Башҡорт телендә дөйөм һәм тар ҡулланышлы һүҙҙәр. | 1 |
| 6 | Иҫкергән һүҙҙәр. Яңы һүҙҙәр. | 1 |
| 7 | Фразеологик берәмектәр. | 1 |
| 8 | Контроль диктант "Туған тел" | 1 |
| 9 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 |
| | **Исем** | |
| 1 | Исем тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 |

| | | |
|---|---|---|
| 2 | Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. Күплек ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы. | 1 |
| 3 | Исемдәрҙең эйәлек заты. Эйәлек заты ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы. | 1 |
| 4 | Исемдәрҙең хәбәрлек заты. | 1 |
| 5 | Телмәр үҫтереү. Инша“Ғаиләм-ҡәлғәм”. | 1 |
| 6 | Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Килештәрҙең мәғәнәләре. Төп килеш. | 1 |
| 7 | Эйәлек килеш. Төшөм килеш. | 1 |
| 8 | Төбәү, урын-ваҡыт, сығанаҡ килештәр. | 1 |
| 9 | Исем тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 |
| 10 | Контроль диктант “Бойҙай” | 1 |
| 11 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 |
| | **Сифат** | |
| 1 | Сифат тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Сифаттарҙың исем урынында килеүе һәм һөйләмдәге роле. | 1 |
| 2 | Сифаттарҙың яһалышы. | 1 |
| 3 | Төп һәм шартлы сифаттар. | 1 |
| 4 | Сифат дәрәжәләре. Сифаттарҙың дөрөҫ яҙылышы. | 1 |
| 5 | Синоним сифаттар. | 1 |
| 6 | Телмәр үҫтереү. Изложение “Беҙ йәшәгән Башҡортостан…” | 1 |
| 7 | “Сифат” темаһын ҡабатлау өсөн һорауҙар һәм эштәр. | 1 |
| 8 | Телмәр үҫтереү. Инша “Башҡортостан - дуҫлыҡ иле”. | 1 |
| 9 | Контроль диктант “Ҡышҡы сәскәләр” | 1 |
| 10 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 |
| | **Һан** | |
| 1 | Һан тураһында төшөнсә. Ябай һәм ҡушма һандар. | 1 |
| 2 | Һан төркөмсәләре. | 1 |
| 3 | Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы. | 1 |
| 4 | Телмәр үҫтереү. Изложение “Урман аҡланы” | 1 |
| 5 | Һан тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 |
| | **Алмаш** | |
| 1 | Алмаш тураһында төшөнсә. | 1 |
| 2 | Алмаш төркөмсәләре. | 1 |
| 3 | Алмаштарбың килеш менән үҙгәреше. | 1 |
| 4 | Телмәр үҫтереү. “Лев Толстой башҡорт далаһында” Э.Арыҫланов картиныһы буйынса инша. | 1 |
| 5 | Алмаш темаһы буйынса тикшереү һорауҙары һәм эштәр. | 1 |
| 6 | Контроль диктант “Минең яратҡан һөнәрем” | 1 |
| 7 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 |
| | **Ҡылым** | |
| 1 | Түбән кластарба үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 |

| | | |
|---|---|---|
| 2 | Телмәр үҫтереү.  Инша“Ҡоштар- беҙҙең дуҫтар”. | 1 |
| 3 | Ҡылым төркөмсәләре. | 1 |
| 4 | Исем ҡылым. | 1 |
| 5 | Исем ҡылым. | 1 |
| 6 | Уртаҡ ҡылым. | 1 |
| 7 | Телмәр үҫтереү. Изложение “Башҡорт кейеме” | 1 |
| 8 | Сифат ҡылым. | 1 |
| 9 | Сифат ҡылым. | 1 |
| 10 | Сифат ҡылымдарҙың үткән, хәҙерге һәм киләсәк заман формалары. | 1 |
| 11 | Сифат ҡылымдарҙың үткән, хәҙерге һәм киләсәк заман формалары. | 1 |
| 12 | Телмәр үҫтереү. Инша “Бал ҡорттары”. | 1 |
| 13 | Хәл ҡылым. | 1 |
| 14 | Хәл ҡылымдың төрҙәре. | 1 |
| 15 | Хәл ҡылымдың төрҙәре. | 1 |
| 16 | Телмәр үҫтереү. “С.Юлаев һәйкәле” һүрәте буйынса инша. | 1 |
| 17 | Ҡылым йүнәлештәре | 1 |
| 18 | Ҡылым йүнәлештәре | 1 |
| 19 | Ҡылым күләмдәре. | 1 |
| 20 | Ҡылым рәүешлеге. | 1 |
| 21 | Бүлек буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм системалаштырыу. | 1 |
| 22 | Контроль диктант “Серле ҡая” | 1 |
| 23 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 |
| | **Рәүеш** | |
| 1 | Рәүеш тураһында төшөнсә. | 1 |
| 2 | Рәүеш төркөмсәләре. | 1 |
| 3 | Рәүештең сифат менән оҡшаш һәм айырмалы яҡтары. | 1 |
| 4 | Телмәр үҫтереү. Миниатюр инша “Әсәйҙәр бит яҙ кеүек” | 1 |
| 5 | Рәүеш дәрәжәләре. | 1 |
| 6 | Рәүештәрҙең яҙалышы. | 1 |
| 7 | Рәүештәрҙең дөрөҫ ябылышы. | 1 |
| 8 | Бүлек буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм системалаштырыу. | 1 |
| 9 | Контроль диктант “ Тракторсы Алтынбикә” | 1 |
| 10 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 |
| | **Теркәүес** | |
| 1 | Теркәүес тураһында төшөнсә. Теркәүестәрҙең бүленеше. | 1 |
| 2 | Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы. | 1 |
| 3 | Бүлек буйынса ҡабатлау. | 1 |
| 4 | Яҙғы тәбиғәт тураһында һүрәт буйынса хикәйә. | 1 |
| | **Бәйләүес** | |

| | | |
|---|---|---|
| 1 | Бәйәүестәр тураһында дөйөм төшөнсә. | 1 |
| 2 | Бәйләүестәрҙең бүленеше. | 1 |
| 3 | Телмәр үҫтереү. Изложение “Тәнәфес ваҡытында” | 1 |
| 4 | Бүлек буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм системалаштырыу. | 1 |
| | **Киҫәксә** | |
| 1 | Киҫәксә тураһында төшөнсә. | 1 |
| 2 | Киҫәксәләрҙең бүленеше. | 1 |
| 3 | Киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышы. | 1 |
| 4 | Бүлек буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм системалаштырыу. | 1 |
| 5 | Телмәр үҫтереү. Инша“Ауылыбыҙҙың күренекле кешеләре” | 1 |
| | **Мөнәсәбәт һүҙҙәр** | |
| 1 | Мөнәсәбәт һүҙҙәр тураһында төшөнсә. | 1 |
| 2 | Телмәр үҫтереү. Изложение “Барбос” | 1 |
| 3 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 |
| | **Ымлыҡ** | |
| 1 | Ымлыҡ тураһында төшөнсә. | 1 |
| 2 | Ымлыҡтарҙың дөрөҫ яҙылышы. | 1 |
| | **Оҡшатыу һүҙҙәре** | |
| 1 | Оҡшатыу һүҙҙәре тураһында төшөнсә. | 1 |
| 2 | Ярҙамлыҡ һүҙҙәрҙе ҡабатлау. | 1 |
| | **Үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм системалаштырыу** | |
| 1 | Лексика | 1 |
| 2 | Морфология | 1 |
| 3 | Контроль диктант “Матурлыҡ”. | 1 |
| 4 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 |
| | | |

**7-се класс**

| № | Дәрес темаһы | Дәрес һаны |
|---|---|---|
| 1 | Башҡорт теле – беҙҙең туған телебеҙ. | 1 |
| 2 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 |
| | **СИНТПАКСИС. ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШ** | |
| 1 | Синтаксистың төп маҡсаты. | 1 |
| 2 | Һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. | 1 |
| 3 | Һүҙбәйләнештәрҙең яһалыу юлдары. | 1 |
| 4 | Эйәртеүле бәйләнештең төрҙәре. | 1 |
| 5 | Телмәр үҫтереү. Инша “Бәхетле ҡартлыҡ” | 1 |
| 6 | Ярашыу. | 1 |
| 7 | Телмәр үҫтереү. А.Тюлькиндың “Салауаттың өйө” картинаһы буйынса инша. | 1 |

| | | |
|---|---|---|
| 8 | Башҡарылыу. | 1 |
| 9 | Йәнәшәлек. | 1 |
| 10 | Һөйкәлеү | 1 |
| 11 | Һүҙбәйләнеш һәм ҡушма һүҙ. | |
| 12 | Нығынған һүҙбәйләнештәр. | 1 |
| 13 | Телмәр үҫтереү. Ә.Лотфуллиндың "Хушлашыу" картинаһы буйынса инша. | 1 |
| 14 | Диктант "Урман - тыуған төйәк" | 1 |
| | **ЯБАЙ ҺӨЙЛӘМ**<br>**Һөйләмдең баш киҫәктәре** | |
| 1 | Эйә менән хәбәр. | 1 |
| 2 | Телмәр үҫтереү Ә.Ситдикованың "Башҡорт балы" картинаһы буйынса инша. | 1 |
| 3 | Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ. | 1 |
| 4 | Телмәр үҫтереү. Инша "Тырышлыҡ – бәхет баҫҡысы" | 1 |
| | **Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре** | |
| 1 | Аныҡлаусы | 1 |
| 2 | Телмәр үҫтереү. Инша "Беҙҙең ауыл" | 1 |
| 3 | Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар. | 1 |
| 4 | Өҫтәлмәлек. | 1 |
| 5 | Тултырыусы. | 1 |
| 6 | Тура һәм ситләтелгән тултырыусы. | 1 |
| 7 | Диктант "Утрауҙа – мышылар" | 1 |
| | **Хәлдәр** | |
| 1 | Рәүеш хәлдәре. | 1 |
| 2 | Күләм-дәрәжә хәлдәре. | 1 |
| 3 | Урын хәлдәре. | 1 |
| 4 | Диктант "Айыуҙың аҡылы бармы?" | 1 |
| 5 | Ваҡыт хәлдәре. Шарт хәлдәре. | |
| 6 | Телмәр үҫтереү. Изложение "Белем алыу – бәхет ул" | 1 |
| 7 | Сәбәп хәлдәре. Маҡсат хәлдәре. | 1 |
| 8 | Кире хәлдәр. | 1 |
| 9 | Һөйләмдә һөйләм киҫәктәренең урынлашыу тәртибе. | 1 |
| 10 | Диктант "Ҡышлаусы ҡоштар" | 1 |
| | **ИКЕ ҺӘМ БЕР СОСТАВЛЫ ҺӨЙЛӘМДӘР** | |
| 1 | Ике составлы һөйләмдәр. | 1 |
| 2 | Бер составлы һөйләмдәр. | 1 |
| 3 | Телмәр үҫтереү. Изложение ""Күңелле ваҡыттар"" | 1 |
| 4 | Диктант "Әсә хәстәрлеге" | 1 |
| | **Бер составлы һөйләмдәр** | |
| 1 | Билдәле эйәле һөйләм. | 1 |
| 2 | Билдәһеҙ эйәле һөйләм. | 1 |
| 3 | Эйәһеҙ һөйләм. | 1 |

| | | |
|---|---|---|
| 4 | Атама һөйләмдәр. | 1 |
| 5 | Диктант “Ҡайтыу” | 1 |
| 6 | Тулы һәм кәм һөйләмдәр | 1 |
| 7 | Телмәр үҫтереү Р.Нурмөхәмәтовтың “Батыр тураһында легенда.Тыуған ауылда” картинаһы буйынса инша. | 1 |
| 8 | Тиң киҫәкле һөйләмдәр. | 1 |
| 9 | Тиң киҫәктәр эргәһендә тыныш билдәләре. | 1 |
| 10 | Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр | 1 |
| 11 | Телмәр үҫтереү. Изложение “Буш хыял” | 1 |
| 12 | Диктант “Йәштән сыныҒырҒа кәрәк” | 1 |
| | **ҺӨЙЛӘМ КИҪӘКТӘРЕ МЕНӘН ГРАММАТИК БӘЙЛӘНЕШЕ БУЛМАҒАН ҺҮҘҘӘР** | |
| 1 | Өндәш һүҙҙәр. Өндәш һүҙҙәр эргәһендә тыныш билдәләре. | 1 |
| 2 | Инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр. | 1 |
| 3 | Диктант “Салауат күпере” | 1 |
| | **ҺӨЙЛӘМДЕҢ АЙЫРЫМЛАНҒАН ЭЙӘРСӘН КИҪӘКТӘРЕ** | |
| 1 | Айырымланыу тураһында төшөнсә. | 1 |
| 2 | Өҫтәлмәлектәрҙең айырымланыуы. | 1 |
| 3 | Телмәр үҫтереү. Изложение “Малайҙар хатаһын төҙәтә” | 1 |
| 4 | Аныҡлаусыларҙың айырымланыуы тураһында. | 1 |
| 5 | Хәл әйтемдәре һәм уларҙың үҙенсәлеге. | 1 |
| 6 | Хәл әйтемдәренең айырымланыуы. | 1 |
| 7 | Телмәр үҫтереү. К.Дәүләткилдеевтың “Башҡорт өйөнөң күтәрмәһе” картинаһы буйынса инша. | 1 |
| 8 | Тура һәм ситләтелгән телмәр. | 1 |
| 9 | Тура телмәрле һөйләмдәр. Уларҙа тыныш билдәләре. | 1 |
| 10 | Диалог | 1 |
| 11 | Цитаталар | 1 |
| 12 | Контроль диктант “Үлемгә үс итеп” | 1 |
| 13 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 1 |
| 14 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 |
| | | |

**8- се класс**

| № | Дәрес темаһы | Дәрес һаны |
|---|---|---|
| 1 | Инеш дәрес. Синтаксис буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 1 |
| 2 | Синтаксис буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 |
| | **Ҡушма һөйләм** | |
| 1 | Ҡушма һөйләм буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 |
| 2 | Ҡушма һөйләм буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 1 |
| 3 | Инша “Тәбиғәттең һәр мибгеле аҫыл” | 1 |

| | | |
|---|---|---|
| 4 | Изложение “Сынрау торна” | 1 |
| 5 | Ҡушма һөйләм тураһында дөйөм төшөнсә. | 1 |
| 6 | Теҙмә ҡушма һөйләм. | 1 |
| 7 | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр. | 1 |
| 8 | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм, уларҙа тыныш билдәләре. | 1 |
| 9 | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм, уларҙа тыныш билдәләре. | 1 |
| 10 | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм, уларҙа тыныш билдәләре. | 1 |
| 11 | Инша “Матурлыҡҡа һоҡлана ла, уны һаҡлай ҙа бел” | 1 |
| 12 | Теркәүесheҙ теҙмә ҡушма һөйләм . | 1 |
| 13 | Теркәүесheҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре | 1 |
| 14 | Теркәүесheҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре | 1 |
| 15 | Теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе ҡабатлау. | 1 |
| 16 | Контроль диктант “Әсәйем юлға сыға” | 1 |
| 17 | Хаталар өҫтөнлә эш | 1 |
| 18 | Изложение “Командир” | 1 |
| | **Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр** | |
| 1 | Баш һәм эйәрсән һөйләм. | 1 |
| 2 | Эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә эйәреү (бәйләнеү) саралары. | 1 |
| 3 | Эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә эйәреү (бәйләнеү) саралары. Тыныш билдәләре. | 1 |
| 4 | Инша “Өр яңы йыл килә” | 1 |
| | **Эйәрсән һөйләм төрҙәре** | |
| 1 | Эйә һөйләм. | 1 |
| 2 | Эйәрсән хәбәр һөйләм. | 1 |
| 3 | Аныҡлаусы һөйләм. | 1 |
| 4 | Тултырыусы һөйләм | 1 |
| | **Хәл һөйләмдәр** | |
| 1 | Ваҡыт һөйләм | 1 |
| 2 | Изложение “Таң нурҙары” | |
| 3 | Урын һөйләм | 1 |
| 4 | Рәүеш һөйләм | 1 |
| 5 | Күләм-дәрәжә һөйләм | 1 |
| 6 | Сәбәп һөйләм | 1 |
| 7 | Инша “Кешеләргә һөйөүегеҙҙе йәлләмәгеҙ” | 1 |
| 8 | Маҡсат һөйләм | 1 |
| 9 | Шарт һөйләм | 1 |
| 10 | Кире һөйләм | 1 |
| 11 | Эйәрсән һөйләм төрҙәрен ҡабатлау | 1 |

| | | |
|---|---|---|
| 12 | Эйәрсән һөйләм төрҙәрен ҡабатлау. | 1 |
| 13 | Инша “Башҡортостан-гөлбостан, былбылстан, нурбостан, шунда тыуып, шунда үҫкән башҡорт тигән арыҫлан”. | 1 |
| 14 | Контроль диктант “Ат яратыу” | 1 |
| 15 | Хаталар өҫтөндә эш | 1 |
| | **Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр** | |
| 1 | Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләм. | 1 |
| 2 | Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрһә тыныш билдәләре. | 1 |
| 3 | Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр | 1 |
| 4 | Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре | 1 |
| 5 | Контроль диктант “Тормош  йәме” | 1 |
| 6 | Хаталар өҫтөнлә эш | 1 |
| 7 | Теҙемдәр | 1 |
| 8 | Ҡушма һөйләм темаһын ҡабатлау | 1 |
| 9 | Ҡушма һөйләм темаһын ҡабатлау | 1 |
| 10 | Изложение “Алтын ҡуллы Сабира” | 1 |
| | **Тыныш билдәләре ҡуйылышын ҡабатлау, дөйөмләштереү** | |
| 1 | Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре | 1 |
| 2 | Өтөр ҡуйылыу осраҡтары | 1 |
| 3 | Нөктәле өтөр ҡуйылыу осраҡтары | 1 |
| 4 | Һыҙыҡ ҡуйылыу осраҡтары | 1 |
| 5 | Изложение  “Ир исеме иҫкермәй” | 1 |
| 6 | Ике нөктә ҡуйылыу осраҡтары | 1 |
| 7 | Тыныш билдәләре ҡуйылышын ҡабатлау | 1 |
| 8 | “Ил яҙмышы – тел яҙмышы” инша | 1 |
| 9 | Контроль диктант   “Берҙән-бер моң” | 1 |
| 10 | Хаталар өҫтөнлә эш | 1 |
| 11 | 5-8-се  кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 |
| 12 | 5-8-се  кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 |
| 13 | Дөйөмләштереү | 1 |
| 14 | Контроль диктант “Дала кисе” | 1 |
| 15 | Хаталар өҫтөнлә эш | 1 |
| | | |

**9- сы класс**

| № | Дәрес темаһы | Дәрес һаны |
|---|---|---|
| | **Телтураһында дөйөм төшөнсә** | |
| 1 | Тел фәнен ни өсөн мотлаҡ өйрәнергә кәрәк? Тел тураһында дөйөм төшөнсә. | 1 |
| 2 | Йәмғиәт тормошонда телдең роле.  Тел – үҫә барыусы ижтимағи күренеш. | 1 |

| | | |
|---|---|---|
| 3 | Башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле. | 1 |
| 4 | Башҡорт теле башҡа ҡәрҙәш телдәр араһында. | 1 |
| | **1-се бүлек (** | |
| 1 | Әҙәби тел һәм диалект.  Башҡорт теленең диалекттары. | 1 |
| 2 | Башҡорт теленең диалекттары. Практик эш. | 1 |
| 3 | Башҡорт әҙәби теле һәм уның үҫеше | 1 |
| 4 | Ике теллелек. | 1 |
| 5 | Үтелгән темалар буйынса күнегеүҙәр. | 1 |
| 6 | Телмәр үҫтереү.  Инша “Уй күрке – тел, тел күрке – һүҙ” темаһына публицистик инша. | 1 |
| | **2-се бүлек** | |
| 1 | Башҡорт теленең стилдәре. Телмәр әҙәниәте. | |
| 2 | Функциональ стилдәр.  Уларҙың төп үҙенсәлектәре | 1 |
| 3 | Йәнле һөйләү стиле. | 1 |
| 4 | Матур әҙәбиәт стиле. | 1 |
| 5 | Фәнни стиль | 1 |
| 6 | Публицистик стиль | 1 |
| 7 | Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле | 1 |
| 8 | Хаттар стиле | 1 |
| 9 | Үтелгән темалар буйынса күнегеүҙәр. | |
| 10 | Телмәр үҫтереү.  Изложение “Ирәндек тауы” | 1 |
| 11 | Хаталар  өҫтөндә эш | |
| | **3-сө бүлек** | |
| 1 | Һүрәтләү саралары. | 1 |
| 2 | Эпитет | |
| 3 | Сағыштырыу | 1 |
| 4 | Метафора. | 1 |
| 5 | Телмәр үҫтереү.  Инша “Ҡәҙерле тыуған ерем, һине ҡыйырһытырға ирек бирмәбеҙ” | 1 |
| 6 | Хаталар өҫтөндә эш | 1 |
| 7 | Синонимдар һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. | 1 |
| 8 | Грамматик синонимдар | |
| 9 | Тасуирлауҙа антитезаны файҙаланыу | 1 |
| 10 | Телмәр үҫтереү.  Инша “Осҡон һүнгән урынды көл ала, ҡояш уҙған юлда нур ҡала” | 1 |
| 11 | Хаталар өҫтөндә эш | 1 |
| 12 | Һүҙҙе һәм уның формаларын телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу | 1 |
| 13 | Телмәр үҫтереү буйынса күнегеүҙәр. | 1 |
| 14 | Телмәр үҫтереү.  Изложение “Ат сабыштары” | 1 |
| 15 | Хаталар өҫтөндә эш | 1 |
| 16 | Контроль диктант “Ирмәк” | 1 |
| | **Риторика** | |
| 1 | Риторика тураһында төшөнсә. | 1 |

| | | |
|---|---|---|
| 2 | Һөйләнәһе һүҙҙең йөкмәткеһе. Темаһы һәм сиктәре. | 1 |
| 3 | Тезистар һәм дәлилдәр. | 1 |
| 4 | Материалдарзы һайлау һәм системалаштырыу. | 1 |
| 5 | Тексты̆ң дөйөм композицияһы инеш. Төп өлөш, һығымта. | 1 |
| 6 | Тексты̆ң планы, Тезис һәм конспект. | 1 |
| 7 | Практик эш. Мәҡәләгә план төҙөү. | 1 |
| 8 | Тексты ижад итеүҙә тел саралары. | 1 |
| 9 | Телмәрҙә һүрәтләү-тасуирлау саралары. | 1 |
| 10 | Телмәрҙең лексик һәм синтаксик үҙенсәлектәре. | 1 |
| 11 | Практик эш. Мәкәләгә рецензия яҙыу. | 1 |
| 12 | Һөйләү һәм уҡыу стилдәре. | 1 |
| 13 | Дискуссия, диспут һәм төрлө бәхәс төрҙәре. | 1 |
| 14 | Практик эш. Доклад, лекция текстарына анализ яһау. | 1 |
| 15 | Билдәләнгән темалалар менән сығыштар яһау. | 1 |
| 16 | Контроль диктант. | 1 |
| | **5-9- сы кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм тәртипкә килтереү** | |
| 1 | Фонетика | 1 |
| 2 | Орфоэпия. Орфография | 1 |
| 3 | Телмәр үҫтереү. Инша “Китап - белем шишмәһе” | 1 |
| 4 | Хаталар өҫтөндә эш | 1 |
| 5 | Лексика | 1 |
| 6 | Башҡорт теленең һүҙлектәре | |
| 7 | Һүҙьяһалыш. Морфология. Орфография | 1 |
| 8 | Телмәр үҫтереү. Изложение А.Йәгәфәрованың “Килендәр” әҫәренән өҙөк. | 1 |
| 9 | Хаталар өҫтөндә эш | 1 |
| 10 | Синтаксис һәм пунктуация | 1 |
| 11 | Контроль диктант “Алмағас” | 1 |
| 12 | Телмәр үҫтереү. Инша “Тормоштағы ғәҙеллек һәм ғәҙелһеҙлек, хаҡлыҡ һәм нахаҡлыҡ” | 1 |
| 13 | Хаталар өҫтөндә эш | 1 |
| 14 | Контроль диктант “Ҡурайсы” | 1 |
| 15 | Телмәр үҫтереү. Изложение “Әнүр Вахитов” | 1 |
| 16 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 1 |
| 17 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 1 |
| | | |

## 5-9-сы класс уҡыусыһының белем дәрәжәһенә талаптар

**Белергә тейеш төшөнсәләр:**

- теҙмә ҡушма,эйәртеүле ҡушма,теркәүесһеҙ ҡушма һөйләмдәр тураһында төшөнсә,баш һәм эйәрсән һөйләм;эйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәре;
- теҙмә ҡушма,эйәртеүле ҡушма,теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре;
- доклад,тезис,конспект,ғариза тураһында төшөнсәләр.

**Күнекмәләр:**

- Ҡушма һөйләмдәргә телдән һәм яҙып синтаксик,пунктуацион тикшеренеү үткәрә белеү;
- айырымланған эйәрсән киҫәкле,хәл әйтемле,тура һәм ситләтелгән телмәрле ябай һөйләмдәрҙә,шулай уҡ теҙмә һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуя белеү;
- йәшәгән урынды,архитектура,тарих һәм сәнғәт ҡомартҡыларын тасуирлауға нигеҙләнгән инша яҙа белеү;
- сағыштырыу юлы менән ике йәки бер нисә персонажға һәм әҙәби персонаждар төркөмөнә ҡылыҡһырлама биреү;
- протокол төҙөй белеү;
- изложниеларҙы һәм иншаларҙы темаһына,төп фекеренә,стиленә ярашлы камиллаштыра,уларҙы орфографик,пунктуацион,грамматик һәм телмәр хаталарын төҙәтә белеү.

**Белем һәм күнекмәләрҙе ғәмәлдә ҡулланыу:**

- анализлау, сағыштырыу, һығымталар эшләү;
- бәхәсләшеү, иҫбатлау, инҡар итеү; дискуссияла ҡатнашыу;
- иптәштәренең эштәрен баһалау;
- тема һәм микротемаларҙы бидәләү;
- диалогтар төҙөү, сығыштар әҙерләү, проекттар төҙөү;
- Интернеттан мәғлүмәттәр һайлап алыу, өҫтәлмә сығанаҡтар менән эшл

Ҡушымта

**Дөйөм белем күнекмәләрен баһалауҙың системаһы һәм нормалары**

**Һүҙлек диктанты** – 30-35 һүҙ

**- баһалау**
Таҙа яҙылған, хатаһы булмаған эшкә - «5»
Бер орфографик хаталы эшкә - “4”
Өс орфографик хаталы эшкә - “3”
Биш орфографик хаталы эшкә - “2”

**Контроль диктант: йыл башында – 120 һүҙ, йыл ҙағында – 140** һүҙ.

**- баһалау:**
“5” - таҙа башҡарылған, хатаһы булмаған эшкә ҡуйыла. Шулай уҡ үтә ауыр булмаған бер пунктуацион хаталы диктант та шулай баһаланырға мөмкин. Өйрәнелмәгән темаларға ҡараған һүҙҙәрҙең хаталары төҙәтелә, әммә иҫәпкә алынмай.
“4” - Ике орфографик, ике пунктуацион, йәки бер орфографик, өс пунктуацион, йәки өс орфографик, бер пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Шулай уҡ орфографик хатаһыҙ, дүрт пунктуацион, йәки дүрт орфографик хата булып, пунктуацион хатаһы булмағанда ҡуйыла
“3” – 5/4, 4/5, 6/3, 7/2, 2/7
“2” – орфографик хата һигеҙҙән артһа, орфографик һәм пунктуацион хаталар суммаһы туғыҙҙан артканда ҡуйыла.
“1” - орфографик һәм пунктуацион хаталар суммамһы ун биштән артып китһә ҡуйыла.

**- контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай**:
1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;
3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;
4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).*
Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыкты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә. Бер үк ҡағиҙә буйынса булған өс пунктуацион хата берәүгә иҫәпләнә.

**- түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә**:
1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;

2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу.

Инша һәм изложениелар яҙҙырыу аша уҡыусыларҙың:

1) теманы аса белеүе, тел сараларын инша йәки изложениеның темаһына һәм уларҙағы төп фекерҙе аңлатыу бурыстарына ярашлы һайлай белеүе,

2) яҙғанда, грамматик нормаларға һәм дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренә таянып эш итеүе тикшерелә. Шуның өсөн иншаға ла, изложениеға ла һәр ваҡыт ике билдә ҡуйыла. Беренсе билдә менән - уларҙың йөкмәткеһе һәм телмәр төҙөлөшө, икенсе билдә менән грамоталылыҡ кимәле баһалана.

**Инша – 2,0 – 3,0 бит (250 һүҙ)**

**- баһалау**
“5” – Йөкмәтке тулыһынса асылған. Фактик хаталар юҡ. Йөкмәтелә ваҡиғалар эҙмә-эҙлекле бирелгән, инша һүҙлек запасы һәм һәр һүҙҙе, һүҙбәйләнеште үҙ урынында ҡулланыу буйынса уңышлы.
“4” – Йөкмәткеһе инша планына тура килә. Ул тулы яҙылған, әммә бәләкәй генә фактик хаталар киткән. Эҙмә-эҙлекле һүрәтләүҙә лә тайпылыштар бар. Яҙма телмәрҙең лексик һәм грамматик ҡоролошо яҡшы. Стиле лә тейешле кимәлгә тап килә.
“3” – Бирелгән теманан ситкә тайпылыуҙар бар. Фактик хаталар ҙа киткән. Эҙмә-эҙлелек бик тура килмәй. Һүҙлек байлығы, стиль һаҡланышы юҡ.
“2” – Инша темаға тап килмәй. Күп кенә фактик хаталар киткән. Эҙмә-эҙлелектән, инша планынан тайпылыу бар. Күп кенә һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр дөрөҫ ҡулланылмаған.
Грамоталылыҡ буйынса баһа диктанттар нормаһына тап килә.

**Изложение –140 – 160 һүҙ. Өйҙә яҙырға бирелгән изложениелар күләме менән артырға ла мөмкин.**

**- баһалау**
Инша һәм диктанттар нормаһына нигеҙләнергә мөмкин.

**Йомғаклау баһаһы**
Йомғаҡлау баһаһы сирек, ярты йыллыҡ һәм уҡыу аҙағында ҡуйыла. Ул, беренсе сиратта, уҡыусыларҙың белергә тейеш төшөнсәләре, күнекмәләре, практикала ҡуллана белеүҙәре һәм яҙма эштәр һөҙөмтәләре буйынса ҡуйыла.

**Уҡыу-уҡытыу методик комплекты һәм материаль-техник ҡулланмалар менән тәьмин итеү**

| УМК | Уҡытыусы өсөн методик әҙәбиәт | Уҡыусылар өсөн әҙәбиәт |
|---|---|---|
| - **Башҡорт теленән программалар** (V – XI кластар өсөн) – Ижевск: КнигоГрад, 2008.<br>- Төп дөйөм белем биреү буйынса башҡорт мәктәптәре өсөн **башҡорт теле буйынса өлгө программалар** / төҙ.: З.М.Ғәбитова. - Өфө: Китап, 2012.<br>**- Дәреслек:**<br>1. Псәнчин В.Ш,Псәнчин Ю.В. Башҡорт теле. Дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн дәреслек.5 класс. Өфө: Китап, 2020.<br>2. Солтанбаева Х.В,Балапанова Л.С. Таһирова С.А. Башҡорт теле.Дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн дәреслек. 6 класс.Өфө: Китап, 2020<br>3.Аҙнабаев А.М, Таһирова С.А. Башҡорт теле. Дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн дәреслек.7 класс. Өфө. Китап, 2020<br>4. Сәмситова Л.Х.,Таһирова С.А.Башҡорт теле. Дөйөм белем биреү ойошмаларының8 класс өсөн дәреслек.Өфө.Китап.2020.<br>5.В.Ш.Псәнчин,Ю.В.Псәнчин .Башҡорт теле.. Дөйөм белем биреү ойошмаларының9 класс өсөн дәреслек. Өфө. Китап,.2020. | - М. И. Баһаутдинова, Н. Ғ. Йәғәфәрова. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән традицион булмаған дәрестәр.Өфө: Китап – 2003<br>- Г.Д.Вәлиева. Текст өҫтөндә эшләү өсөн дидактик материалдар. 5-6-сы кластар өсөн. – Өфө: Китап, 2011<br>- Баһаутдинова М.И., Баһаутдинов Н.М., Йәғәфәрова Г.Н. Интеллектуаль уйындар / - Өфө: Китап, 2011<br>- Сәйетбатталов Ғ.Ғ. һ.б. Башҡорт теле: Педагогия колледждары һәм училищелары өсөн дәреслек. - Өфө: Китап, 2004<br>- Толомбаев Х.А., Атнағолова С.В. Диктанттар йыйынтығы:башҡорт теленән 5-9-сы кластар өсөн ҡулланма. – 3-сө баҫма, үҙгәрешле. - Өфө: Китап, 2009<br>- Бикбаева Т.Я., Ҡунафина Т.Ы. Башҡорт теленән диктанттар йыйынтығы. Милли мәктәптәрҙең 5-11-се синыфтарында эшләгән уҡытыусылар | 1. Лингвистик анализ өлгөләре.<br>2. Баһаутдинова М.И., Баһаутдинов Н.М., Йәғәфәрова Г.Н. Интеллектуаль уйындар / - Өфө: Китап, 2011<br>3. Башҡорт теленең грамматик нормалары.<br>4. Башҡортса гәзит-журналдар. |

| | | |
|---|---|---|
| | өсөн ҡулланма. - Өфө. “Эдвис” методика үҙәге, “Башҡортостандың бәләкәй даһийы”, 2008<br>- Ғималова М.Ғ., Рәхимова С.М. Изложениелар өсөн текстар йыйынтығы: 5-9-сы синыфтар уҡытыусылары өсөн ҡулланма. Өфө: Китап, 1996 | |

**Материаль-техник ҡулланмалар**

Интерактив таҡта
ноутбук
принтер